Муниципаль белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

**Ата-әсәләр өсөн консультация:**

# Баланың һаулығы – беҙҙең ҡулда



Тәрбиәсе:
Йыһангирова Гөлнара
Марат ҡыҙы

ң һаулығы –
беҙҙең ҡулда



Тыуымдың кәмеүе, яңы тыуған балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең һаулығы насарайыуы һаулык һаклау ойошмаларын хәүефкә һала. Шулар араһында балаларҙың неврология ауырыуҙары һан буйынса гына түгел, йәшәүгә кәрәкле мөһим функцияларҙың (хәрәкәт һәм психик) боҙолоуы йәһәтенән дә республикала алдынғы урындарҙы биләй.

Ауырыуҙарҙың 40 процентының нервы системаһы ҡарында ятканда ук зарарлана. Табиптар билдәләүенсә, йөклө вакытта эскән, тарткан, тейешенсә тукланмаған катын-кыҙҙарҙың балаларында йыш кцҙәтелә бындай хәл. Шулай ук теге йәки был сәбәп менән эстәрен быуып йөрөгәндәрҙең балалары ғәрип булып, психик кәмселектәр менән тыуа.



Миҫалға республикабыҙ районларының береһенән килгән ғаиләне атанылар. Йәш ярымлыҡ бала ултырмай ҙа, йөрөмәй ҙә, һөйләшмәй ҙә. Башы ғәҙәттәгенән ҙур. Бак-тиһәң, әсә кеше, эсен белендермәҫ өсөн, һығып торған кейемдә йөрөгән, эскән, тарткан. Кем менәндер түшәк бүлешергә, енси мөнәсәбәткә инергә оялмаған, ә эс кәпәйтеп йөрөүҙе оят һанаған дыр, күрәһең. Шулай итеп, үҙен дә, баланы ла ғазаплы яҙмышка дусар иткән. Бындай йортта икенсе баланың тыуыуы, укыу-укытыу мәсьәләһе ауыр хәл итенә, матди яктан етешһеҙлектәр, көсөргәнешле климат, йыш айырылышыуҙар...



Һуңғы ун йыл эсендә генә ғаиләгә ярҙам итеү ниәте менән перинаталь, йөклөлөктө планлаштырыу үҙәктәре асылды. Монитор күҙәтеү ярҙамында (УЗИ) ҡарындағы сабыйҙың үҫешен тикшереү етешһеҙлектәрҙе асыклау мөмкинлеген бирә, молекуляр-генетик тикшереүҙәр ауырыу бәпес тыуыуын иҫкәртә ала. Шулай итеп, тыумаҫ элек үк балаға диагноз ҡуйып була.

Зәғиф балалар тыуыуынас экология ла, көнкүреш сәбәптәре лә, катын-кыҙҙың теге йәки был хроник сирҙәре лә, төрлө стрестар ҙа сәбәпсе булыуы ихтимал. Ләкин күпселек осраҡта буласаҡ әсәләрҙең вакытында тикшерелеп тороуҙан баш тартыуы, ҡайһы бер ҡаҙиҙәләрҙе һакламауҙары, сәләмәт йәшәү рәүеше алып бармауҙары килтерә был хәлгә.



Юкка гына ата-бабаларыбыҙ, ете быуынын белмәй тороп, кыҙҙарын кейәүгә бирмәгән. Ҡыҙҙаныска каршы, бөгөн был йоланы һанға һукмаусылар ҙа бар. Тағы бер миҫалға күҙ һалайык: 10 һәм 12 йәшлек матур ғына ике малай. Матурҙар, әммә... улар йөрөй алмай (мускулдары тотмай) һәм 18 йәштә-рен дә тултыра алмаясактар - икеһе лә үлемгә дусар ителгән. Кем тарафынан? тип һорарһыҙыҙ. Ата-әсәләре тарафынан, сөнки улар ике туғандар...



2002 йылдан республикала скрининг - баш мейеһен ультразвук ярҙамында тикшереү - ысулы индерелде. Тыуғандан алып бер йәшкә тиклем 3 тапкыр үткәрелергә тейеш ул. Кәмселектәр асыкланған осраҡта, ни тиклем иртәрәк дауалайһың, шул тиклем файҙаһы нығыраҡ: нервы системаһын тулыһынса тергеҙеү мөмкинлеге күпкә арта, ти белгестәр.

Акушер-гинекологтар, генетик, эмбриолог, педиатрҙарҙың ойошкан эшләүҙәренә ҡарамаҫтан, бөгөнгө көндә 1000 кешенең һәр бишенсеһе неврологик етешһеҙлектәр менән тыуа. Уларҙың һәр береһе стационар дауалауға мохтаж.

Статистика белешмәләренә караганда, һуңғы биш йыл эсендә республикала балаларҙың неврология ауырыуҙары кимәле 14 процентҡа кәмегән.

Бөтәбеҙгә лә мәглүм булыуынса, яңы тыуған баланы тәүге айҙа 3 тапкыр участка педиатры һәм 3 тапҡыр шәфҡәт туташы өйгә килеп ҡарарға тейеш. Ауыл ерендә быны фельдшерҙар башкара. Бала етлекмәй тыуған осраҡта йә иһә ниндәйҙер кәмселектәр менән тыуһа, был һандар 4 һәм 12-гә тиң булырҙа тейеш.



1 айлык бала тауышҡа иғтибар итергә, предметтарҙы күҙәтергә; 2 айҙа уйынсыктарын, төрлө әйберҙәрҙе тота алырға, күтәргәндә башын тоторға, эсендә яткан килеш башын ҡалҡытырға, көлөргә, тауыштар сығарырға; 3 айҙа инде урынында әйләнергә, ҡулынан тотканда тартылырға, уйынсыктарын тотоп тора алырға; 6 ай тулғанда ултырырға, якындарын танырға, уйынсыктарын бер кулынан икенсе ҡулына күсерә белергә; 7 айҙа инде яткан ерҙән үҙе торорға, имгәкләргә (баҫып тора алыуы ла ихтимал), сәпәкәйләй белергә тейеш, ошо осорҙа сит кешеләрҙән ятһына, яңы әйберҙәр менән ҡыҙыкһына, аралашыу, иғтибар талап итә. 9 айҙа төрлө хәрәкәттәрҙе, һүҙҙәрҙе ҡабатлай.

Бер йәш тулғанда атлай башлай, үҙ аллы баҫып тора, ата-әсәһенең, якындарының, уйынсыктарының исемен белә, айырым һүҙҙәр әйтә.

Балағыҙҙың үҫеше ошоларға (якынса) тап килмәһә, борсолорға урын бар. Әлбиттә, төрлө бала төрлөсә үҫешә: атлап китеүе, һөйләшеүе бер нисә айҙа алданыраҡ йә һуңырак булыуы ихтимал, ә бына тәүге айҙарҙа күреү, ишетеү һәләттәренә иғтибарлыраҡ булырға кәрәк. Шулай ҙа, әгәр һеҙҙең



ғаиләлә һаулығы сикләнгән бала тыуа икән, юғалып ҡалырға ярамай. Эште ундай балаларҙы тәрбиәләү буйынса әҙерләнгән махсус китаптарҙан башларға кәрәк. Был өлкәлә тәжрибәләре булған башка ғаиләләрҙән өлгө алыу ҙа ҡамасауламай.'- Бала менән күберәк аралашканда, шөғөлләнгәндә, уның өсөн якшы шарттар булдырғанда үҙеңдең ҡурҡыуыңды ла еңәргә, баланың үҫешенә лә ярҙам итергә мөмкин.

Тимәк, вакытында кәрәкле тикшереүҙәр үтеп, кайҙалыр сабырлык күрһәтеп, үҙ һаулығығыҙға,

